# Һынамыштар



ҠЫШҠЫ ҺЫНАМЫШТАР

Ағаста бәҫ күп булһа, бал куп була.
Ағастарҙы бәҫ ҡаплаһа - һыуыҡҡа, томан төшһә - йылыға.
Бер ҡырпаҡ менән ҡыш булмаҫ.
Боҙ ҡытыршы булып туңһа, иген уңыр.
Бүрәнә шартлаһа, һыуыҡ булыр.
Йыл башында ел булһа, йыл әйләнә ел-дауыл булыр.
Ҡар күп булһа, йәй иген уңыр.
Ҡар тәрән булһа, иген уңыр.

Ҡыш көнө болот юлланып торһа, йылы булыр.
Ҡыш көнө бәҫ күп булһа, бал күп булыр.
Ҡыш көнө тоҙ еүешләнһә, ҡар яуа.
Ҡыш көнө шәре сыҡһа, ашлыҡ уңыр.
Ҡыш көнөндә ҡояш әйләнәһендә түңгәләк күренһә, буран булыр;
Әгәр инде был түңгәләк ҡояшҡа бик яҡын булһа, аяҙ булыр.

Ҡыш көнөндә урман елһеҙ шаулаһа, буран булыр.
Ҡыш күк күкрәһә, бик ҡаты ел булыр.
Ҡыш урман шаулаһа, йылы көндәр көт.
Ҡыш һыуыҡ булһа, иген уңыр.
Ҡышҡы көн йәйҙе әйтер, йәйге көндәр яйҙы әйтер.
Ҡыш ҡар күп булһа, йәй ямғырлы булыр.
Ҡыш ҡарһыҙ булһа, йәй ярлы була.

Мейес көслө тартһа - һыуыҡ була, насар тартһа - епшек була.
Мейестә утын шартлап янһа, көндәр йылытырға булыр.
Мөрйәнән сыҡҡан төтөн ергә ятһа, йәйен ямғыр булыр, ҡышын ҡар яуыр.
Төтөн тура сыҡһа - һыуыҡҡа тарта.
Төндә бәҫ булһа, көндөҙ ҡар яумай.

## МАРТ АЙЫНА БӘЙЛЕ ҺЫНАМЫШТАР

Март башында тамсы тамһа, йәй яҡшы килә.
Март сыҡмай – дәрт сыҡмай.
Мартта йылы булһа, йыл һалҡын була.
Мартта көн менән төн тиңләшә.
Марттың шартын апрель сығарыр.
Яҙ иртә килһә, ашлыҡ уңыр.
Март береһендә аяҙлыҡ – йәй көнө ҡыярға туҡлыҡ.

Мартта ҡар өҫтөндәге һалам ҡарға эреп инһә, бер айҙан ҡар китер.
Беренсе мартта ел иҫеп торһа, бөтөн йәй елле булыр;
Көн ҡояшлы, елһеҙ булһа, яҙ, йәй яҡшы булыр, иген уңыр.
Ҡар ағасҡа йәбешеп торһа, көн епшетер.
Март башында сәпсек эсерлек һыу булһа, йәй яҡшы килер.

## МАЙ АЙЫНА БӘЙЛЕ ҺЫНАМЫШТАР

Майһыҙ ҡар бөтмәҫ.
Майҙа ямғыр күп булһа, арыш уңыр.
Иртә күк күкрәһә, йыл ямғырлы булыр.
Муйыл сәскә атһа, көн һалҡынайыуын көт.
Май айы һалҡын булһа, игенгә туҡлыҡ булыр, себенгә юҡлыҡ булыр.
Болот юлланып торһа, ямғырға.
Ямғыр яуһа, ергә май.

Ҡайын һыуы күп булһа, йәй ямғырлы булыр.
Май айы һалҡын булһа, игенгә туҡлыҡ булыр, себенгә юҡлыҡ булыр.
Ҡуҙғалаҡ күп булһа, киләһе йылдың ҡышы йылы булыр.
Майҙа ямғыр күп булһа, арыш уңыр.
Сыйырсыҡ бала сығарғанда һоло, ҡарабойҙай сәс.
Торна бейеһә, һауа йылыныр.
Бүҙәнә ҡысҡырһа, бойҙай уңа.

АЙҘАР МЕНӘН БӘЙЛЕ ҺЫНАМЫШТАР

Ғинуарҙың көнө ҡыҫҡа, февралдең айы ҡыҫҡа.
Беренсе ғинуарҙа көн йылы булһа, арыш уңыр;
Ел булһа, тары уңыр, томан булһа, һоло уңыр.
Йыл башында ел булһа, йыл әйләнә ел-дауыл булыр.
25 ғинуар ҡояшлы икән - күсмә ҡоштарҙың көньяҡтан иртәрәк ҡайтыуҙарын көт.

Февралдә ҡайын ботағында ҡар алҡа-алҡа булып аҫылынып торһа, ул йылды иген уңыр.
Февралдә һыуыҡ: «Һыйыр мөгөҙөн һындырыр инем дә, көнөм генә ҡыҫҡа, тип әйтә»,
— имеш, ти.
Февраль ҡыш мөгөҙөн һындыра.
Февраль — ҡарға, ә апрель һыуға бай.
Йылы февраль һыуыҡ яҙ килтерә.
Февраль – бүреләрҙең туй айы.

Беренсе мартта ел булһа, йыл алама килер.
Беренсе мартта көн елле булһа, бөтөн йәй елле булыр.
Беренсе мартта көн ҡояшлы, елһеҙ булһа, яҙ, йәй яҡшы булыр, иген уңыр.
Март башында сәпсек эсерлек һыу булһа, йыл яҡшы була.
Март башында тамсы тамһа, йәй яҡшы килә.

Март - марттың көнө шарт .
Мартта йылы булһа, йыл һалҡын була.
Мартта йылы булһа, яҙ һалҡын, елле була.
Мартта көн менән төн тиңләшә.
Мартта шарт та шорт, апрелдә апырыр ҙа шапырыр.
Марттың берендә аяҙ булһа, яҙ буйы аяҙ була.
Марттың егерме бишендә һыу ҡатһа, бер аҙналыҡ юлға сыҡ.

Марттың шартын апрель сығарыр.
Март сыҡмай – дәрт сыҡмай.
Март берендә аяҙлыҡ – йәй көнө ҡыярға туҡлыҡ.
Мартта ҡар өҫтөндәге һалам карға эреп инһә, бер айҙан ҡар китер.
Беренсе мартта ел иҫеп торһа, бөтөн йәй елле булыр;
Көн ҡояшлы, елһеҙ булһа, яҙ, йәй яҡшы булыр, иген уңыр.

Апрель артыҡ йылы булһа, май һалҡын, елле-ямғырлы булыр.
Апрель етһә, яҙ етер, иреп ағып ҡар китер.
Апрелдең алтыһында аяҙ булһа, йәй ҡоро килер, болотло булһа, ашлыҡ уңыр.
Апрелдең шапырыныуы марттың дименән.
Апрель яртыһында торна ҡысҡырһа, йыл яҡшы килә.

Май айы һалҡын булһа, игенгә туҡлыҡ булыр, себенгә юҡлыҡ булыр.
Майҙа ямғыр күп булһа, арыш уңыр.
Майһыҙ ҡар бөтмәҫ.
Май икмәк булдырһа, июнь бесән өлгөртә.

Июндә ҡояш калҡҡанда томра торһа, көн боҙола.
12 йыллыҡ мөсәл тураһында һынамыштар
Тауыҡ йылы тары сәс,
Барыҫ йылы барын сәс.
Сысҡан йылы – игенле,
Шуға сысҡан да күбәйә.

Тауыҡ йылы – ҡоролоҡ,
Ҡуй йылы – ҡытлыҡ,
Ҡуян йылы – йотлоҡ,
Йылан йылы – баллыҡ,
Ҡабан йылы – байлыҡ,
Лыу (аждаһа) йылы – һыулыҡ.

Барыҫ йылды барын сәс,
Һис булмаһа, тары сәс.
Барыҫ йылы — байлыҡ,
Һыйыр йылы — туҡлыҡ,
Ҡуй йылы — ҡытлыҡ,
Ҡуян йылы — йотлоҡ.

## Көҙ

Беренсе октябрҙә ел көн буйына төньяҡтан булһа, ҡыш һалҡын килер. Әммә ел көньяҡтан булһа, ҡыш йылы булыр һәм киләһе йылда ашлыҡ уңыр. Әгәр был көндө ел көнбайыштан булһа, киләһе йыл ашлыҡ уртаса булыр.

Беренсе октябргә тиклем ҡырау төшһә, көҙ оҙон булыр

Көҙөн ҡоштар түбән осһа – ҡыш һалҡын, бейек осһа, йылы килер.

Егерме өсөнсө октябрҙә ураҡ ай остары менән төньяҡҡа ҡараһа – ҡыш тиҙ килер, ҡар ҡоро ергә ятыр, көньяҡҡа ҡараһа – ҡыш ҡабаланмаç, көндәр йонсоу, бысраҡ булыр.

Дүртенсе ноябргә тиклем ҡар күренмәç.

Ҡыр ҡаҙҙары иртә китһә, ҡыш иртә килер.

Ҡарлуғас йылы яҡҡа иртә китһә, ҡыш оҙаҡ һәм һыуыҡ булыр.

Туғыҙынсы ноябрҙә бәç ҡунһа, алдағы көндәр – һыуыҡ, томан булһа, йылы торор.

Йорт ҡоштары баштарын ҡанаттары аçтына йәшерһә, көн һалҡынайыр.

Ҡаҙҙар, өйрәктәр ҡарҙа ҡойонһалар, көн йылынасаҡ һәм буран булыуы ихтимал.

Ҡырмыçҡалар бейек иләү яһаһа – һалҡын ҡышҡа.

Беренсе ҡар көндөҙ яуһа – ҡыш һыуыҡ булыр, төндә яуһа йылы килер.

Әгәр беренсе ҡар ваҡ бөртөклө яуһа, яҙын ҡар тиҙ иремәç, йәй яғырлы булыр, ашлыҡ-бесән яҡшы уңыр.

Сентябрҙә күк күкрәһә, көҙ оҙаҡ һәм йылы булыр.

Беренсе октябрҙә ҡар күренһә, ҡырҡ көндән һуң ҡар ятыр.
Ҡоштар китеүе һуңлаһа, йылы көҙ, цомшаҡ ҡыш көтөлә.
Көҙөн япраҡтар ҡойолоу тиҙ үтә икән, ҡыш ҡаты була.
Миләш, имән сәтләүеге уңһа,ҡыш һалҡын килә.

Таң атҡанда болотло булып, ҡояш сыҡҡанда аяҙатһа, ул көндө ямғыр яумаҫ.
Борсаҡ бик уңһа, яңынан өс йыл уңмаҫ.
Сентябрь аяҙ булһа, ҡыш һалҡын килер
Сентябрҙең егерме һигеҙендә ҡыр ҡаҙҙары көньяҡҡа осһа, иҫкесә 1 октябрҙә ҡар ятыр.
Беренсе ноябрҙә ямғыр өҫтөнә ҡар яуһа, йәй һалҡын килер, бесән бик уңыр.

Ҡыр ҡаҙҙары йылы яҡҡа киткәндә түбән осһа, тиҙҙән ҡар яуыр.
Көҙ көнө ҡуяндар бер эҙҙән йөрөһә, ҡышын ҡар күп булыр.

Бал ҡорттары кейәне асыҡ ҡалдырһа, ҡыш йылы була.
Турғай түбәндән осһа, көҙ ҡыҫҡа булыр.
Беренсе октябрҙә
Көҙ оҙон килһә, яҙ һуң килер.

Сентябрҙә ҡар күренһә, көҙ оҙаҡ һәм йоносоу килер.
Боҙ ҡытырша булып туңһа, иген уңыр.
Беренсе октябрҙә ел көньяҡтан булһа, ҡыш йылы булыр һәм киләһе йылға ашлыҡ уңыр.
Көҙ аҙағында түңәрәк-түңәрәк ваҡ ҡына боҙ яуһа, ҡыш һыуыҡ булыр.